МУНИЦИПАЛЬНОЕ ОБЩЕОБРАЗОВАТЕЛЬНОЕ БЮДЖЕТНОЕ УЧРЕЖДЕНИЕ
ОСНОВНАЯ ОБЩЕОБРАЗОВАТЕЛЬНАЯ ШКОЛА СЕЛА ТАЙМЕЕВО МУНИЦИПАЛЬНОГО РАЙОНА САЛАВАТСКИЙ РАЙОН
РЕСПУБЛИКИ БАШКОРТОСТАН

«УТВЕРЖДАЮ»

Директор МОБУ ООШ с. Таймеево

_______________Г.Х. Рахимова
Приказ № 112 от 29. 08. 2023 г.

«РАССМОТРЕНА»
на заседании ШМО
Протокол № 1 от 29.08.2023г.
Председатель МО
_____________Г. Р. Валиуллинаё

«ПРИНЯТА»
на заседании Педсовета
Протокол № 1 от 29. 08.2023г.

«Согласовано»
Заместитель директора по УВР
____________ Р.С. Султанова

# Рабочая программа по государственному башкирскому языку
# 3 класс

Учитель начальных классов Нигматуллина И.М..
*первая квалификационная категория*

**2023-2024 учебный год**

**1.Аңлатма яҙыу**

В основе Рабочей программы лежат следующие **документы:**

1. Федеральный закон Российской Федерации от 29 декабря 2012 года № 273-ФЗ «Об образовании в Российской Федерации»;
2. Закон Республики Башкортостан от 01.07.2013 № 696-З «Об образовании в Республике Башкортостан»;
3. Приказ Министерства образования и науки РФ от 17.12.2010 №1897 «Об утверждении федерального государственного образовательного стандарта основного общего образования» (зарегистрировано в Минюсте РФ 01.02.2011 №19644);
4. Приказ Министерства образования и науки РФ от 29 декабря 2014 г. N 1644 "О внесении изменений в приказ Министерства образования и науки Российской Федерации от 17 декабря 2010 г. N 1897 "Об утверждении федерального государственного образовательного стандарта основного общего образования" (зарегистрировано в Минюсте РФ 06.02.2015 №35915);
5. Приказ Министерства образования и науки Российской Федерации от 31.12.2015 № 1577 «О внесении изменений в федеральный государственный образовательный стандарт основного общего образования, утвержденный приказом Министерства образования и науки Российской Федерации от 17 декабря 2010 г. № 1897»;
6. Приказ Министерства образования и науки РФ от 5 сентября 2013 г. N 1047 "Об утверждении Порядка формирования федерального перечня учебников, рекомендуемых к использованию при реализации имеющих государственную аккредитацию образовательных программ начального общего, основного общего, среднего общего образования" (С изменениями и дополнениями от: 8 декабря 2014 г., 14 августа 2015 г.);
7. Приказ Министерства образования и науки РФ от 31 марта 2014 г. № 253 “Об утверждении федерального перечня учебников, рекомендуемых к использованию при реализации имеющих государственную аккредитацию образовательных программ начального общего, основного общего, среднего общего образования”;
8. Письмо Департамента государственной политики в сфере общего образования от 29.04.2014г. № 08-546 «О федеральном перечне учебников»;
9. Примерные основные образовательные программы начального и основного общего образования.
10. Примерные учебные планы для 1-4 классов всех общеобразовательных организаций, составленных в соответствии с федеральными государственными образовательными стандартами основного общего образования;
11. Основная образовательная программа ООО МОБУ ООШ с. Таймеево, приказ № 68 от 29.08.2016 г.
12. Учебный план муниципального общеобразовательного бюджетного учреждения основная общеобразовательная школа с. Таймеево муниципального района Салаватский район Республики Башкортостан (приказ №112 от 29.08. 2023 г.)
13. Положение о рабочей программе по учебным предметам, утверждено приказом от 28.08. 2017 г. № 60.
14. Учебник: Ф.Ф.Муртазина, З.Г. Нафикова. Башкирский язык.Уфа: Китап, 2017.

**Уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәрҙең 3-се класы өсөн дәүләт (башҡорт) телдән эш программаһы.**
**Был эш программаһында федераль һәм республика закондары талаптары тормошҡа ашырыла:**

1. Рәсәй Федерацияһы Мәғариф һәм Фән министрлығының №1089 бойороғо менән 5.03.2004 10.11.2011 йыл раҫланған Дәүләт белем биреү стандарттарының Федераль компоненты, Рәсәй Федерацияһы Мәғариф һәм Фән министрлығының 10.11.2011 йыл №2643 31.01.2012 йыл № 69 бойороғо менән үҙгәртелгән.
2. Рәсәй Федерацияһының "Рәсәй Федерацияһында Мәғариф тураһында" Федераль законы 29.12.2012 №273-ФЗ.
3. Башҡортостан Республикаһының"Башҡортостан Республикаһының Мәғариф тураһында" законы 01.07.2013 №696-З
4. "Рәсәй Федерацияһы халыҡтары телдәре тураһында" законы 25 октябрь 1991 №1807-1 (24.07.98, 11.12.2002 йыл үҙгәртелгән)
5. "Башҡортостан халыҡтары телдәре тураһында" законы 15.02.1999йыл №216-З
6. Башҡортостан Республикаһында Милли мәғарифты үҫтереү концепцияһы 31.12.2009 йыл №УП-730

Эш программаһы Башҡортостан Республикаһы Салауат районы муниципаль районы Таймый ауылы төп дөйөм белем биреү мәктәбе муниципаль дөйөм белем биреү бюджет учреждениеһының төп белем биреүҙең дөйөм белем биреү программаһы нигеҙендә төҙөлдө. Рабочая программа составлена на основе учебного плана МОБУ ООШ с.Таймеево основной образовательной программы основного общего образования. Дөйөм белем биреү ойошмаларында башҡорт телен дәүләт теле булараҡ өйрәнеү буйынса программа федераль дәүләт стандарттарында ҡуйылған талаптар һәм һөҙөмтәләр нигеҙендә төҙөлдө. **Эш программаһы дәүләт (башҡорт) теле булараҡ** 3 класта өйрәнелә, 34 сәғәткә бүленгән (аҙнаға 1 сәғәт).

## 2 . Уҡыу йылы аҙағына планлаштырылған һөҙөмтәләр

### 1. Программа буйынса башҡорт теленә өйрәтеүҙең маҡсаты һәм бурыстары:

**1.Танып белеү маҡсаты**

Уҡыусылар башҡорт халыҡ мәҙәниәтен, ғөрөф-ғәҙәттәрен, тарихи үткәнен, бөгөнгөһөн, киләсәген белергә һәм аңларға, хөрмәт итергә, әҙәбиәт-сәнғәт вәкилдәренең ижади ҡаҙаныштары менән үҙенең рухи үҫешен байыта алыу мөмкинлеген файҙаланырға тейеш.

Күп милләтле Башҡортостан Республикаһы, уның халҡы, башҡорт халҡының республикала төп, ерле халыҡ булыуы, башҡорт халыҡ ижады, билдәле шәхестәр, уларҙың эштәре, ижады менән таныштырыу башланғыс этапта танып белеү маҡсатының йөкмәткеһен тәшкил итә.

**2. Үҫтереү маҡсаты**

Белем биреү маҡсаты методика фәнендә бик оҙаҡ йылдар буйы иң беренсе маҡсат итеп һаналды. Ләкин башҡа дидактик маҡсаттарҙы икенсе урында ҡарау белем биреү маҡсатының тейешле дәрәжәлә тормошҡа ашырылмауына килтерә. Шәхестең белемле булыуы уның фекерләү һәләте үҫешенән тора. Уҡытыу процесында үҫтереү, тәрбиә маҡсаттарын даими күҙаллап эшләү - сифатлы белем биреүҙең беренсе шарты (Л.С.Выготский). Был хәҡиҡәтте бигерәк тә башланғыс кластарҙа, балаларҙың белем алыу эшмәкәрлеге башланған осорҙа иҫтә тотоу мөһим.

Башланғыс этапта балаларҙың психик үҫешен түбәндәге йүнәлештәрҙә үҫтереүгә айырыуса иғтибар талап ителә:

- Фекерләүҙе үҫтереү менән бәйле психик функциялар: логик фекерләү, сәбәп-һөҙөмтә бәйләнештәрен табыу, индуктив, дедуктив фекерләү;
- Хәтерҙе үҫтереү (ихтыярлы, ихтыярһыҙ), иғтибарлылыҡты үҫтереү;
- Аралаша белеү һәләтен үҫтереү (аралашыусанлыҡ, хислелек, эмпатия хистәре);
- Ихтыяр көсө, маҡсатлылыҡ, әүҙемлек кеүек һәләттәрҙе үҫтереү.

**3.Тәрбиәүи маҡсат**

Уҡыусыларҙың тейешле дәрәжәләге тәрбиәһенән башҡа уҡытыу процесын ойоштороу мөмкин түгел. Әлбиттә, уҡытыусының шәхси сифаттары, уҡыусы менән махсус ойошторолған мөғәләмәһе уҡытыу һәм тәрбиә процесында ҙур роль уйнай. Ләкин тәрбиә процесы беренсе сиратта уҡытыуҙың йөкмәткеһе һәм методтары менән бәйле. Тимәк, уҡытыуҙың йөкмәткеһен һайлағанда, материалдың тәрбиәүи мөмкинлектәрен иҫәпкә алыу - программа һәм дәреслек авторҙары өсөн төп талап. Балаларҙың йәш үҙенсәлектәренә тура килгән, уларҙы ҡыҙыҡһындырған, әхләҡи проблемаларҙы үҙ эсенә алған йөкмәтке, беренсенән, уҡытыу процесында тәрбиәүи функция башҡарһа, икенсенән, туранан-тура коммуникатив мотивация тыуҙырыу менән бәйле. Программаға балалар араһындағы мөнәсәбәттәрҙе сағылдырған, әхләҡи проблемаға эйә булған бәләкәй күләмле әҙәби әҫәрҙәр һәм автор текстары индерелде.

**4. Белем биреү маҡсаты**

Уҡыусыларҙың башҡорт теле буйынса лексик, грамматик күнекмәләре, филологик белемдәре сиктәрендә генә ҡалмайынса, телмәр эшмәкәрлегенең бөтә төрҙәрендә лә ҡулланырлыҡ кимәлдә булырға тейеш. Шул ваҡытта ғына башҡорт телен туған тел буларaҡ өйрәнеү бурысы үтәлә.

- **Һөйләү телмәрен үҫтереү:**

1) картина буйынса һөйләү;

2) уҡыған тексты аңлы һөйләү;
3) шиғыр, тиҙәйткестәрҙе яттан һөйләй белеү;
4) йәштәштәре, ололар менән билдәле бер аралашыу сфераларында, ситуацияларҙа диалогик һәм монологик телмәр ойоштора белеү;
5) үҙенең һәм йәштәштәренең эшмәкәрлеге, тирә-яҡ мөхит хаҡында үҙенең мөнәсәбәтен белдереп, бәйләнешле һөйләй белеү.

- **Ишетеп аңлау (аудирование):**
  1) уҡытыусының дәрес, уйын ситуациялары менән бәйле һорауҙарын, күрһәтмәләрен аңлау;
  2) әңгәмәләштәшенең таныш материалға нигеҙләнгән һөйләмен аңлау, уға мөнәсәбәтен белдереү;
  3) тыңлағанда һөйләм, һүҙбәйләнештәрҙе билдәләү, интонацияны айырыу;
  4) әҙәби әҫәрҙәрҙең, текстарҙың йөкмәткеһен тыңлап аңлау;
  5) аудиотаҫмалағы әкиәт, хикәйәне ишетеп аңлау.
  - **Уҡыу телмәрен үҫтереү:**
    1) аңлап, дөрөҫ итеп уҡыу;
    2) текстағы тыныш билдәләренә ҡарап, тейешле пауза һәм интонацияларҙы үтәү;
    3) тексты үҙ аллы аңлы уҡыу;
    4) унан кәрәкле мәғлүмәтте табып уҡыу;
    5) бәләкәй күләмле шиғырҙарҙы яттан һөйләү.
  - **Яҙыу телмәрен үҫтереү**
    1) айырым һөйләмдәрҙе, бәләкәй текстарҙы үҙгәрешһеҙ, дөрөҫ итеп күсереп яҙыу;
    2) матур яҙыу күнекмәләре;
    3) байрам открыткалары  яҙыу;
    4) һүҙлек диктанты яҙыу.

**1. Уҡыусыларҙың белем кимәленә талаптар:**

1. Һүрәтләү, хикәйәләү тибындағы текстарҙы тыңлау һәм аңлап ҡабул итеү:
   - текстың планын төҙөү;
   - текстың йөкмәткеһен план буйынса һөйләү, билдәле ситуацияла тексты ижади дауам итеү.
2. Бирелгән тема буйынса диалог төҙөү, диалогты дауам итеү:
   - ҡараған фильм, картина, ишеткәндәр, бирелгән ситуация буйынса хикәйә төҙөп һөйләү;
   - ваҡиғаға, геройҙарҙың эштәренә, ҡылыҡтарына баһа биреү, үҙ фекеңде иҫбатлау;
   - тестағы образлы һүҙҙәрҙе, һүрәтләү-тасуирлау сараларын, мәҡәлдәрҙе табыу, телмәрҙә дөрөҫ ҡулланыу;
   - тексты икенсе телгә тәржемә итеп һөйләү;

- 10-12 шиғырҙы яттан тасуири итеп һөйләй белеү.

3. Тексты дөрөҫ, аңлы, тасуири уҡыу:

- тексты мәғәнәүи өлөштәргә бүлеү, уларға исем биреү, план төҙөү;
- гәзит-журналдарҙан, китаптарҙан материал йыйып, хикәйә төҙөү;
- әҫәрҙән кәрәкле өлөштәрҙе һайлап ала белеү;
- текстан аңлашылмаған һүҙҙәрҙе табыу, һүҙлектәр менән эш итә белеү.

4. Хәрефтәрҙе дөрөҫ һәм матур яҙыу, дөрөҫ тоташтырыу:

- Ижади диктанттар, өйрәтеү изложениелары һәм иншалар яҙыу;
- Иптәшең яҙғанын һәм үҙ яҙмаларыңды тикшереү, камиллаштыра белеү күнекмәләре.

5. Өйҙә башҡортса гәзит-журналдар, китаптар уҡыу һәм класта шулар тураһында фекер алышыу (кластан тыш уҡыу күнекмәләре).

**2. Уҡытыу һөҙөмтәләренә талаптар:**

**I. Шәхси һөҙөмтәләр:**

- башҡорт теленең БР-да дәүләт теле булыуын аңлау һәм төшөнөү;
- башҡорт теленән алынған белем һәм күнекмәләрҙе мәктәптә һәм көндәлек тормошта ҡулланыу;
- аралашыуҙа рус теленән алған белемде башҡорт телендә тәржемә итеп ҡуллана белеү;
- башҡорт телен башҡорт халҡының мәҙәни һәм рухи байлығын өйрәнеү сараһы булараҡ ҡулланыуҙы аңлау;
- төрлө социаль ситуацияларҙа оло кешеләр һәм үҙ тиңдәштәрең менән хеҙмәттәшлек күнекмәләрен үҫтереү.
- Тыуған илгә, уның теленә, мәҙәниәтенә, тарихына  һөйөү һәм хөрмәт;
- әҫәрҙәге геройҙарҙың ҡылыҡтарына дөрөҫ баһа биреү;
- хислелек, үҙеңдең хис-тойғоларыңды  аңлай һәм билдәләй (әйтә) белеү;
- башҡа кешеләрҙең хис-тойғоларын аңлай һәм билдәләй белеү, уртаҡлаша алыу;
- матурлыҡ тойғоһо – тәбиғәт матурлығын күрә белеү, йәнле тәбиғәткә һаҡсыл ҡараш;
- нәфис һүҙҙең матурлығын тоя белеү,үҙеңдең телмәреңде камиллаштырыуға ынтылыу;
- ғаилә ҡиммәттәрен аңлау, үҙеңдең яҡындарыңа ҡарата ихтирам, рәхмәт, яуаплылыҡ тойғолары;
- текст авторы менән диалог ҡороуға  ҡыҙыҡһыныу,уҡыуға ихтыяж;
- мораль тәртип ҡағиҙәләрен көйләүсе этик тойғолар – намыҫлана, ояла белеү, ғәйебеңде танып ғәфү үтенеү.

**II. Метапредмет һөҙөмтәләре (**Универсаль уҡыу эшмәкәрлеген  формалаштырыу сараһы булып һөҙөмтәле уҡыу технологияһы һәм уҡыусыларҙың уҡыуҙағы уңыштарын баһалау технологияһы тора).**:**

**1. Көйләүсе универсаль уҡыу эшмәкәрлеге**:
- дәрестең темаһын һәм маҡсатын үҙ аллы табып әйтә белеү;
- уҡытыусы менән берлектә уҡыу проблемаһын сисеүҙең планын төҙөү;
- ҡуйылған маҡсатҡа ирешеү өсөн планды тормошҡа ашырыу, кәрәк осраҡта үҙеңдең эшмәкәрлегеңә төҙәтмәләр индереү;
- уҡытыусы менән берлектә баһалау критерийҙарын билдәләү һәм шуға ярашлы үҙеңдең һәм иптәштәреңдең эшенә баһа бирә белеү.

**2. Танып-белеү универсаль уҡыу эшмәкәрлеге:**
- текстағы мәғлүмәттең бөтөн төрҙәрен дә иҫәпкә алыу;
- уҡыу төрҙәрен маҡсатҡа ярашлы файҙаланыу: текст менән танышыу өсөн уҡыу, күҙ йүгертеп уҡып сығыу, мәғлүмәт алыу өсөн ентекләп уҡыу;
- телмәр ситуацияһына ярашлы үҙеңдең фекереңде телдән әйтеү төрлө формала бирелгән мәғлүмәтте таба белеү (тотош текст, иллюстрация, схема, таблица);
- мәғлүмәтте бер форманан икенсе формаға үҙгәртә белеү (план, схема, таблица төҙөү);
- һүҙлектәр, белешмә материал менән менән файҙалана белеү;
- анализлай һәм синтезлай белеү;
- сәбәп-һөҙөмтә бәйләнештәрен урынлаштыра белеү;
- фекерләй белеү;

Танып-белеү УУЭ үҫтереү сараһы булып дәреслектең тексттары һәм уның методик аппараты, һөҙөмтәле уҡыу технологияһы тора.

**3. Коммуникатив универсаль уҡыу эшмәкәрлеге:**
- телдән һәм яҙма формала яуап бирә белеү;
- телмәр сараларын төрлө коммуникатив мәсьәләләрҙе сисеүҙә дөрөҫ ҡулланыу, телмәрҙең диалогик һәм монологик формаларын яҡшы белеү;
- үҙеңдең фекереңде нигеҙләй белеү һәм дөрөҫ итеп башҡаларға еткерә алыу;
- башҡаларҙы ла ишетә һәм тыңлай белеү, уларҙың ҡараштарын аңларға тырышыу, кәрәк булғанда үҙеңдең ҡарашыңды төҙәтә белеү;
- дөйөм эшмәкәрлек барышында ҡарар ҡабул итә белеү;
- һорауҙар бирә белеү.

**III. Предмет һөҙөмтәләре.**
-яңғыраған телмәрҙе (ололарҙың һәм тиңдәштәреңдең әйтеүе, балалар тапшырыуҙары, аудиояҙмалар һәм мәғлүмәти технологияның башҡа формаларын) адекват ҡабул итеү;
- һүҙҙәрҙе, ижектәрҙе, өндәрҙе һәм һөйләмде төҙөү, әйтеү буйынса белем һәм күнекмәләр;
- бирелгән тема буйынса диалог төҙөй белеү; һорауҙарға ҡыҫҡа һәм тулы итеп яуап биреү, диалогты башлай һәм тамамлай белеү;
- әҙерләнеп һәм әҙерләнмәй етеҙ, аңлап һәм тасуири уҡыу, тексты ҡыҫҡа һәм һайлап һөйләй белеү;
- таныш булған орфографик ҡағиҙәләрҙе ҡулланып, уҡытыусы ярҙамында һәм үҙ аллы өйрәнеүҙә контроль характерҙа яҙма эштәрҙе башҡара белеү;
- үҙ аллы эшен тикшерә һәм башҡорт теленән предмет-ара (башҡа предмет дәрестәрендә) үҙ белемеңде анализлай белеү;

- төп предметтан предмет-ара аңлатмаларҙы үҙләштереү;
- мәктәптә һәм мәктәптән тыш ҡыҙыҡһыныуҙарынан сығып, башҡорт телендә аралашыу.
- әҙәбиәттең дөйөм һәм милли мәҙәниәтте сағылдырыусы күренеш булыуын, әхлаҡи ҡиммәттәрҙе, традицияларҙы һаҡлау һәм быуындан быуынға еткереү сараһы икәнлеген аңлау;
- уҡыуҙың шәхси үҫеш өсөн әһәмиәтен аңлау, Тыуған ил һәм уның кешеләре , тирә-яҡ донъя тураһында хәбәрҙар булыу;
- уҡытыусы, уҡыусылар башҡарыуында текстарҙы тыңлап ҡабул итә белеү;
аңлап, дөрөҫ, тасуири итеп ҡысҡырып уҡыу;
- текстың исеменә, авторҙың фамилияһына, иллюстрацияларға, терәк һүҙҙәргә ҡарап уның йөкмәткеһен күҙаллау.
- таныш булмаған тексты эстән уҡыу, һүҙлек эшен үткәрә белеү;
- тексты өлөштәргә бүлеү, ябай план төҙөү;
- текстың төп фекерен үҙ аллы билдәләй белеү;
- текстан геройҙы ҡылыҡһырлаусы материалды таба белеү;
- тексты тулыһынса һәм һайланма һөйләй белеү;
- еройға ҡылыҡһырлама бирә белеү;
- телдән һәм яҙма һүрәтләй белеү;
- уҡыу барышында картиналарҙы күҙ алдына килтереп һөйләй белеү;
- уҡылғанға ҡарата үҙеңдең мөнәсәбәтеңде белдереү, нимәнең ни өсөн оҡшағанын (оҡшамағанын) аңлата алыу;
- асыҡланған билдәләре буйынса әҫәрҙәрҙе хикәйә, повесть, пьеса жанрҙарына бүлә белеү;
- проза әҫәрендә геройҙы, авторҙы һәм һөйләүсене айыра белеү;
- нәфис әҙәбиәттә сағыштырыуҙарҙы, эпитеттарҙы, йәнләндереүҙәрҙе күрә белеү;
- уҡылған әҫәрҙәрҙә авторҙы, геройҙарҙы һәм әҫәрҙең исемен дөрөҫ атау.

**3. Уҡытыу предметының төп йөкмәткеһе.**

| | |
|---|---|
| **Танышыу** | **1 сәғәт** |
| **Минең мәктәбем** | **6 сәғәт** |
| **Минең республикам** | **5 сәғәт** |
| **Мин һәм минең ғаиләм** | **7 сәғәт** |
| **Мин һәм минең дуҫтарым** | **5 сәғәт** |
| **Мине уратып алған донъя** | **10 сәғәт** |

## 4.Тематик план

| № | Дәрес темаһы | Дәрес һаны | Дата | | Иҫкәрмә |
|---|---|---|---|---|---|
| | | | План. | Факт. | |
| 1 | 1. Таныш булығыҙ! 2. Хәлдәр нисек? | 1 | 07.09.2023 | | |
| 2. | 7. Белем байрамы. 8. Мин дежур. 10. Мәктәбем. | 1 | 14.09.2023 | | |
| 3 | **11. Контроль күсереү.** | **1** | 21.09.2023 | | |
| 4. | 13. Башҡорт теле дәресендә. 14. Хәйләкәр һандар. | 1 | 28.09.2023 | | |
| 5. | 17. Ҡайсы йырлай. 18.Рәсем төшөрәбеҙ 19.Музыка донъяһында | 1 | 05.10.2023 | | |
| 6. | 20. Нимә белдек? Нимәгә өйрәндек? | 1 | 12.10.2023 | | |
| 7. | Инеш диктант. | 1 | 19.10.2023 | | |
| 8. | 22. Башҡортостан- бай яҡ. | 1 | 26.10.2023 | | |
| 9. | 25. Дуҫлыҡ монументы. 26. Салауат Юлаев һәйкәле. 27. Тыуған яҡты өйрәнеү музейы. | 1 | 09.11.2023 | | |
| 10 | 30. Йәйәү йөрөү файҙалымы? 31. Сәйәхәтниндәй була? | 1 | 16.11.2023 | | |
| 11 | 34. Нимә белдек? Нимәгә өйрәндек? | 1 | 23.11.2023 | | |
| 12 | 35**. Контроль күсереү.** | 1 | 30.11.2023 | | |
| 13 | 35. Олатайым кәңәштәре. 36. Өләсәйем кәңәштәре | 1 | 07.12.2023 | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| 14 | 39. Ғаилә байрамы. 40. Ҡунаҡтар килде. | 1 | 14.12.2023 | | |
| 15 | 41.Әсәйемә ярҙам итәм 43.Минең хыялым | 1 | 21.12.2023 | | |
| 16 | 44.Йөҙ юл 46 Минең шөғөлөм 47.Спорт һәм мин | 1 | 28.12.2023 | | |
| 17 | 48. Ялым күңелле үтә. 49. Нимә белдек? Нимәгә өйрәндек? | 1 | 11.01.2024 | | |
| 18 | **45. Контроль диктант.** Хаталар өҫтөндә эш. | 1 | 18.01.2024 | | |
| 19 | 52. Үҙеңде нисек тоторға? 53. Әҙәп ҡағиҙәләре. | 1 | 25.01.2024 | | |
| 20 | 57. Сәләм Өфөнән. 58. Яратҡан уйынсығым | 1 | 01.02.2024 | | |
| 21 | 61. Дуҫым Аҡйондоҙ. 62. Ысын дуҫ ниндәй була? 63. Атайҙар байрамы. | 1 | 08.02.2024 | | |
| 22 | 66. Нимә белдек? Нимәгә өйрәндек? **Контроль күсереү.** | 1 | 15.02.2024 | | |
| 23 | 67. Нимә ул тәбиғәт? 68. Тауҙар илендә | 1 | 22.02.2024 | | |
| 24 | **71.** Йәшел алтын 74 Йәшел аптека | 1 | 29.02.2024 | | |
| 25 | 75. Ҡыр хайуандары | 1 | 07.03.2024 | | |
| 26 | 77. Ҡымыҙ- файҙалы эсемлек. | 1 | 14.03.2024 | | |
| 27 | 80. Бөжәктәр файҙалымы. 81. Ағастар- урман йәме. | 1 | 21.03.2024 | | |
| 28 | . 87. Беҙҙең яҡта ҡыш. 88. Көн ниндәй? | 1 | 04.04.2024 | | |
| 29 | 90.Бына яҙ етә 91.Яҙғы байрамдар | 1 | 11.04.2024 | | |
| 30 | **Контроль күсереп яҙыу.** | 1 | 18.04.2024 | | |
| 31 | 92. Еңеү байрамы | 1 | 25.04.2024 | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| 32 | 94 Дүрт миҙгел | 1 | 02.05.2024 | | |
| 33 | Нимә белдек? Нимәгә өйрәндек? | 1 | 16.05.2024 | | |
| 34 | Үтелгәндәрҙе ҡабатлау. | 1 | 23.05.2024 | | |

## 5.Уҡыу-методик әсбаптәр исемлеге.

Уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәрҙең 3-сө класы уҡыусылары өсөн З.Ғ Нафикова, Ф.Ф.Мортазина авторлығында “Башҡорт теле” дәреслеге (Өфө: Китап,2017)